Муниципальное бюджетное общеобразовательное учреждение
«Башкирская гимназия № 25» городского округа город Салават
Республики Башкортостан

УТВЕРЖДАЮ
Директор МБОУ БГ № 25 г.Салавата
_____________ Г.Ш. Давлеткулова
Приказ от «29» августа 2019 г. № 323

# РАБОЧАЯ ПРОГРАММА
по учебному предмету «Родной (башкирский) язык»
уровень образования: основное общее образование
срок реализации: 5 лет
количество часов в неделю:
5 кл. – 2 ч., 6 кл. – 2 ч., 7 кл. – 2 ч., 8 кл. – 2 ч., 9 кл. – 2 ч.

Программа составлена на основе «Примерные программы основного общего образования. Башкирский язык (5-9). Габитова З.М. –Уфа: «Китап», 2012; УМК: Башкирский язык. Учебное пособие для 5 класса общеобразовательных организаций с родным (башкирским) языком обучения . Псянчин В.Ш., Псянчин Ю.В., Габитова З.М., Аюпов Р.Р., Мухаметова Р.М. – Уфа: «Китап», 2017; 6 класс. Султанбаева Х.В., Балапанова Л.С. – Уфа: «Китап», 2017; 7 класс. Азнабаев А.М., Тагирова С.А., Газизуллина М.А. – Уфа: «Китап», 2017; 8 класс. Самситова Л.Х, Тагирова С.А., Рахимова Э.Ф., Исламова Т.М. – Уфа: «Китап», 2017; 9 класс. Псянчин В.Ш., Псянчин Ю.В, Игликова А.И., Утябаева Ф.Ю. – Уфа: «Китап», 2017.

Авторы-составители:
МО учителей башкирского языка и литературы

СОГЛАСОВАНО
Протокол заседания МО учителей башкирского языка и литературы
от « 28» августа 2019г. №1

СОГЛАСОВАНО
Заместитель директора по УВР
_____________ Д.Ш.Исламгулова
«29» августа 2019г.

Салават
2019

## I. ПЛАНЛАШТЫРЫЛҒАНҺӨҘӨМТӘЛӘР

Төп дөйөм белем биреү мәктәбенең 5-9 класс уҡыусыларының туған (башҡорт) теле программаһын үҙләштереүҙә һөҙөмтәләр булып түбәндәгеләр тора:

Шәхси һөҙөмтәләр:

- башҡорт телен башҡорт халҡының төп милли-мәҙәни ҡиммәте булараҡ аңлау, интеллектуаль, ижади һәләтлектәрен һәм шәхестең мораль-этик сифаттарын үҫтереүҙә туған телдең ролен, уның мәктәптә белем алыу процесындағы әһәмиәтен билдәләү;
- башҡорт теленең эстетик ҡиммәтен аңлау; туған телгә ҡарата ихтирам, уның менән ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү; милли мәҙәни сағылыш булараҡ, башҡорт теленең таҙалығын һаҡлау тураһында хәстәрлек күреү; телмәр үҙ камиллаштырыуға ынтылыу;
- аралашыу процесында кәрәкле һүҙлек запасына эйә булыу һәм үҙ фекереңде иркен еткереү өсөн тейешле грамматик саралар ҙы үҙләштереү; үҙ телмәреңде күҙәтеү һәм уны баһалау күнекмәләрен булдырыу.

Предмет һөҙөмтәләре:

- телдең төп функциялары тураһында, башҡорт теленең башҡорт халҡының милли теле, Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле булыуы тураһында, тел менән халыҡ мәҙәниәттең бәйләнештәре тураһында, кеше һәм йәмғиәт тормошондағы роле тураһында ҡараш булдырыу;
- гуманитар фәндәр системаһында туған телдең урынын һәм мәғарифта тулыһынса уның ролен аңлау;
- туған тел тураһында төп фәнни нигеҙҙе үҙләштереү; уның кимәл һәм берәмектәр бәйләнешен аңлау;
- тел ғилеменең төп аңлатмалары: лингвистика һәм уның төп бүлектәре; тел һәм телмәр, телмәр аралашыуы, һөйләү һәм яҙма телмәр, монолог, диалог һәм уларҙың төрҙәре; аралашыу ситуациялары, фәнни, публицистик,, рәсми-эшлекле стилдәр, матур әҙәбиәт стиле; функциональ телмәр төрҙәре( хикәйәләү, һүрәтләү, фекер йөрөтөү); текст, текст төрҙәре; телдең төп берәмектәре, уларҙың билдәләре һәм телмәрҙә ҡулланыу үҙенсәлектәрен үҙләштереү;
- башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһының төп стилистик ресурстарын, башҡорт әҙәби теленең төп нормаларын, һөйләү этикет нормаларын үҙләштереү;
- телдең төп берәмектәрен, грамматик категорияларын анализлау һәм таныу, тел берәмектәрен аралашыу шарттарына ярашлы ҡулланыу;
- һүҙгә төрлө анализ төрҙәрен (фонетик, морфематик, һүҙьяһалыш, лексик, морфологик), төп билдә һәм структура күҙлегенән сығып, күп аспектлы анализ яһау;
- тел-һүрәтләү саралары һәм уларҙы үҙ телмәреңдә ҡулланыу;
- туған телдең эстетик функцияһын таныу, матур әҙәбиәт текстарын анализлағанда телмәрҙең эстетик кимәлен баһалау.

Метапредмет һөҙөмтәләре:

- телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрен үҙләштереү:

*Аудирование һәм уҡыу:*

- төрлөсә уҡыу күнекмәләрен булдырыу (эҙләнеү, ҡарап сығыу, танышыу, өйрәнеү), төрлө стилдәге, жанрҙағы текстарҙы үҙләштереү;
- телдән һәм яҙма хәбәр иткән мәғлүмәтте ( коммуникатив йүнәлеш, текст темаһы, төп фекер; төп һәм өҫтәмә мәғлүмәт) адекват ҡабул итеү;
- төрлө стилдәге һәм жанрҙағы тексты ишетеп, адекват ҡабул итеү; төрлө төрҙәге аудирование менән эш итеү (һайлап алыу, танышыу);
- төрлө сығанаҡтарҙан мәғлүмәтте һайлап алыу һәләтлеге (матбуғат саралары, уҡыу өсөн тәғәйенләнгән компакт-дискылар, интернет ресурстары); төрлө типтағы һүҙлектәр менән иркен ҡулланыу, белешмә өсөн әҙәбиәт, шулай уҡ электрон маларҙан һайлап алыу күнекмәләрен булдырыу;
- һайлап алыу алымдары менән эш итә белеү һәм тәғәйен темаға материалды системаға килтереү; уҡыу йә аудирование һөҙөмтәһендә алынған мәғлүмәтте үҙ аллы эҙләй алыу күнекмәләренә эйә булыу; мәғлүмәтте ҡайтанан эшләй алыу, еткерә белеү;
- стилистик үҙенсәлектәрҙе иҫәпкә алып, йөкмәткеһен һәм ҡулланылған тел сараларынан сығып, фекерҙе сағыштыра алыу;

*Һөйләү һәм яҙыу:*

- алдағы уҡыу эшмәкәрлегенең (индивидуаль һәм коллектив) маҡсатын билдәләү һәләтлелеге, хәрәкәттең эҙмә-эҙлелеге, өлгәшелгән һөҙөмтәләрҙе баһалау һәм уларҙы телдән һәм яҙма формала адекват аныҡ итеп әйтеү;
- тыңланған йә уҡылған тексты тәҡдим ителгән кимәлдә (план, һөйләү, конспект, аннотация) һөйләй алыу;
- төрлө стилдә һәм жанрҙа, адресланыуға ҡарап һәм аралашыу ситуацияһына ҡарап телдән һәм яҙма текст төҙөй алыу;
- телдән һәм яҙма формала үҙ фекеренде иркен еткерә белеү, тексты логик яҡтан эҙмә-эҙлекле төҙөү талаптарын һаҡлау;
- төрлө төрҙәге монологты (хәбәрләү, һүрәтләү, фекер йөрөтөү; төрлө төрҙәге монологтың берләшеүе) һәм диалог (этикеты һүҙ эсенә алған, диалог-һорашыу, диалог-аралашыуға өндәү, диалог-фекер алышыу һ.б. төрлө төрҙәге диалог берләшеүен) үҙләштереү;
- ғәмәлдә төрлө телмәрҙәге аралашыуҙың орфоэпик, лексик, грамматик, хәҙерге башҡорт әҙәби теленең стилистик нормаларын һәм яҙма телдә төп орфографик һәм пунктуацион ҡағиҙәләрҙе һаҡлау;
- телмәр этикет нормаларын һаҡлап, аралаша алыу, телмәр аралашыу прцесында ым-ишара, мимиканы ҡулланыу;
- уҡыу процесында һәм көндәлек аралашыуҙа үҙ телмәреңде контролдә тота алыу; йөкмәткенән, һүҙҙәрҙе урынлы ҡулланыуҙан сығып, үҙ телмәреңде баһалай белеү; грамматик һәм телмәр хаталарын таба һәм уларҙы төҙәтә алыу; үҙ тексыңды мөхәррирләү һәм камиллаштыра белеү;
- үҙ тиңдәштәрең аудиторияһында ҙур булмаған доклад менән сығыш яһау; бәхәстә, төрлө аргументтар ҡулланып, көнүҙәк проблемалар буйынса сығыштарҙа ҡатнашыу;
- алынған белем һәм күнекмәләрҙе көндәлек тормошта ҡуллана белеү; туған телде башҡа фәндәрҙә белем алыу сығанағы булараҡ файҙаланыу; тел күренештәрен анализлау буйынса алған белем һәм күнекмәләрҙе предмет-ара ҡулланыу;

- аралашыу процесында тирә-яҡтағы кешеләр менән коммуникатив маҡсатлы бәйләнештә, ниндәйҙер эш төрөн бергә эшләү, бәхәстә, күтәрелгән көнүҙәк темаларҙа фекер алышыуҙа ҡатнашыу: шәхестәр менән мәҙәни аралашыу барышындағы төрлө ситуацияларҙа телмәр этикетының милли-мәҙәни нормаларын үҙләштереү.

*5-се класты тамамлағанда уҡыусылар белергә тейеш:*

- фонетика, телмәр өндәре, ижек, баҫым, өндәр системаһы бүленеше, төп законлыҡтары;
- графика, алфавит, хәрефтәрҙең өндәрҙе сағылдырыуы төшөнсәләре;
- орфоэпия, графика, орфография ҡағиҙәләре;
- лексика, һүҙҙең лексик һәм грамматик мәғәнәһе килтереп тыуҙырған тел күренештәре;
- грамматика, морфемалар системаһы, һүҙьяһалыш юлдары;
- текст һәм уның эсендәге һөйләмдәр, уларҙың стилдәре;
- телмәр төрҙәре (типтары).

Алынған белем һөҙөмтәләре ниндәй булырға тейеш:

- фонетика, өн-хәреф, һүҙьяһалыш, һүҙ төҙөлөшө буйынса анализ яһай белеү;
- һүҙбәйләнеш, ябай ике составлы һөйләмдәр, теркәүесheҙ һәм теркәүесле ҡушма һөйләмдәрҙе төҙөй белеү;
- фонетик законлыҡтарҙы айыра белеп, орфография ҡағиҙәләрен тәртипкә килтерә белергә тейеш, урыҫ теленән кергән һүҙҙәр менән эш итә белергә тейеш;
- һөйләү һәм яҙыу телмәрендә лексик күренештәр менән эш итә белергә, төрлө һүҙҙәр ҡуллана белергә тейеш;
- яһаусы һәм үҙгәртеүсе ялғауҙарҙы айыра белергә тейеш.

*6-сы класты тамамлағанда уҡыусылар белергә тейеш:*

- лексика, һүҙҙең лексик мәғәнәһе, һүҙҙең тура һәм күсмә мәғәнәһе, синоним, антоним, омоним;
- исемдәрҙең һан, килеш менән үҙгәреше, күплек һәм килеш ялғауҙарының дөрөҫ яҙылышы, яңғыҙлыҡ исемдәрҙең дөрөҫ яҙылышы;
- ҡылымдарҙың заман, һан, зат менән үҙгәреше;
- ярҙамсы һүҙ төркөмдәре, уларҙың яҙылышы, һөйләмдәге роле.
- ижади диктанттар, изложениелар һәм иншалар яҙыу.
- һүҙлектәр менән файҙалана белеү;
- һүҙҙәрҙе яһаусы һәм үҙгәртеүсе ялғауҙарҙың килеү тәртибе;
- үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙҙәрҙең телмәрҙәге роле.

Алынған белем һөҙөмтәләре ниндәй булырға тейеш:

- һүҙбәйләнештәргә, ике составлы ябай һөйләмдәргә синтаксик анализ яһау,
- һөйләм киҫәктәренә атамалар биреү, уларға дөрөҫ һыҙыу, морфологик бирелешен таный белергә тейеш;
- синтаксик законлыҡтарҙы айыра белеп, орфография, ябай һөйләм төҙөлөшө буйынса ҡағиҙәләрҙе тәртипкә килтерә белергә, һөйләм киҫәктәре буйынса тикшерә белергә тейеш;

- өндәш, инеш һүҙе һәм тиң киҫәктәре, тура телмәре булған ябай һөйләмдәрҙә тыныш билдәләрен ҡуя белеү.

<u>*7-се класты тамамлағанда уҡыусылар белергә тейеш:*</u>

- ике составлы, бер составлы, кәм һөйләм; һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәре; эйә менән хәбәрҙең сағылыу ысулдары, тыныш билдәләренең принциптары;
- айырымланған эйәрсән киҫәкле ябай һөйләмдәрҙә тыныш билдәләренең ҡуйылыш ҡағиҙәләре, эйә менән хәбәр араһында һыҙыҡ ҡуйылыу ҡағиҙәһе, һөйләмдәрҙә инеш һүҙ, инеш һүҙбәйләнеш, инеш һөйләм, ымлыҡтар булғанда тыныш билдәләренең ҡуйылышы; тура һәм ситләтелгән телмәрле, цитаталы һөйләмдәрҙә тыныш билдәләренең ҡуйылышы.

Алынған белем һөҙөмтәләре ниндәй булырға тейеш:

- һүҙбәйләнештәргә, ике составлы ябай, бер составлы, тура телмәр булған һөйләмдәргә синтаксик анализ яһау, ике составлы һөйләмдәр, тиң киҫәктәр, инеш инеш һүҙбәйләнеш, инеш һөйләмдәр, өндәш һүҙҙәр булған тарҡау һөйләмдәр төҙөү;
- һөйләм киҫәктәренә атамалар биреү, уларға дөрөҫ һыҙыу, морфологик бирелешен таный белергә тейеш;

синтаксик законлыҡтарҙы айыра белеп, орфография, ябай һөйләм төҙөлөшө буйынса ҡағиҙәләрҙе тәртипкә килтерә белергә, һөйләм киҫәктәре буйынса тикшерә белергә тейеш;

- өндәш, инеш һүҙе һәм тиң киҫәктәре, тура телмәре, айырымланған киҫәктәре булған ябай һөйләмдәрҙә тыныш билдәләрен ҡуя белеү;
- хикәйәләү тексын, тасуирлау элементтары индереп, ентекле һәм һайлап изложение яҙыу, йәшәгән урынды, архитектура, тарих һәм һәм сәнғәт ҡомартҡыларын тасуирлауға нигеҙләнгән инша яҙа белеү;
- сағыштырыу юлы менән ике йәки бер нисә персонажға һәм әҙәби персонаждар төркөмөнә ҡылыҡһырлама яҙыу;
- изложениеларҙы һәм иншаларҙы темаһына, төп фекеренә, стиленә ярашлы камиллаштыра, уларҙа орфографик, пунктуацион, грамматик һәм телмәр хаталарын төҙәтә белеү.

*8-се класты тамамлағанда уҡыусылар белергә тейеш:*

- ябай, ҡушма һөйләм синтаксисын, стилистикаһын иркен файҙалана белеү;
- тыныш билдәләре, текст, һөйләм интонацияһы, телмәр тибын аңлы ҡабул итеү;
- һүҙбәйләнеш, ябай, ҡушма һөйләм, тура телмәр, диалог, айырымланыу күренештәре менән эш итә белеү;
- бөтә төр анализдар: фонетик, лексик, морфологик, һүҙьяһалыш, синтаксик, стилистик анализдарҙы үтәү;
- орфоэпия, графика, орфография ҡағиҙәләре;
- текст һәм унын эсендәге һөйләмдәр, уларҙың стилдәре;
- телмәр төрҙәре (типтары) буйынса анализдар;
- һүрәтләү сараларын текстан таба белергә һәм ҡулланырға, башҡорт теленең һүҙлек байлығын белергә тейеш.

*9-сы класты тамамлағанда уҡыусылар белергә тейеш:*

- йәмғиәт тормошонда телдең роле, туған телдең әһәмиәте, башҡа донъя телдәре араһында тотҡан урыны, йәмғиәт үҫешендәре роле, ижтимағи әһәмиәтен аңлы ҡабул итеү;
- ябай, ҡушма һөйләм синтаксисын, стилистикаһын иркен файҙалана белеү;
- тыныш билдәләре, текст, һөйләм интонацияһы, телмәр тибын аңлы ҡабул итеү;

- һүҙбәйләнеш, ябай, ҡушма һөйләм, тура телмәр, диалог, айырымланыу күренештәре менән эш итә белеү;
- бөтә төр анализдар:фонетик, лексик, морфологик, һүҙьяһалыш, синтаксик, стилистик анализдарҙы үтәү;
- орфоэпия, графика, орфография ҡағиҙәләре;
- текст һәм уның эсендәге һөйләмдәр, уларҙың стилдәре;
- телмәр төрҙәре (типтары) буйынса анализдар;
- һүрәтләү сараларын текстан таба белергә һәм ҡулланырға, башҡорт теленең һүҙлек байлығын белергә тейеш.

*Төп дөйөм белем биреү мәктәбенең 5-9 класс уҡыусыларының туған (башҡорт) теле буйынса уҡыу-уҡытыу программаһында планлаштырылған һөҙөмтәләрҙең үҙләштерелеүен баһалау.*

Класта һәм өйҙә башҡарыла торған яҙма эштәр өйрәтеү һәм тикшереү характерында була. Уларға түбәндәгеләр инә:

- башҡорт теленән төрлө типтағы күнегеүҙәр;
- тәржемә эштәре (башҡорт теленән рус теленә һәм киреһенсә);
- дәреслектәрҙәге әҙәби текстарға план төҙөү;
- һорауҙарға яҙма яуаптар һәм иншалар;
- тел һәм әҙәби материалдар буйынса аналитик һәм дөйөмләштереү тибындағы схемалар, проекттар һ.б. төҙөү.

Башҡорт теленең ағымдағы, сирек йәки йыл аҙағында, шулай уҡ уҡыу йылы башында инеү диктанты, ҙур темаларҙан һуң йомғаҡлау контроль эштәре үткәрелә. Ағымдағы контроль эштәр программаның өйрәнелгән материалын үҙләштереүҙе тикшереү маҡсатында уҙғарыла. Уларҙың төрө һәм үткәреү йышлығы өйрәнелә торған материалдың ҡатмарлылығынан, уҡыусыларҙың белем кимәленән сығып билдәләнә.

Программа материалының үҙләштереү кимәле уҡыусыларҙың дәрестәрҙә телдән биргән яуаптарына һәм яҙма эштәренә ҡарап баһалана. Бының өсөн башҡорт теленән һәр класта контроль эштәр, яҙма эштәр үткәреү ҡарала.

*Белемдәрҙе тикшереү өсөн төп контроль эштәр төрҙәре.*

- диктанттар: контроль, аңлатмалы, һүҙлек, ижади, ирекле, схематик, график, “үҙ-үҙемде тикшерәм”;
- тексҡа комплекслы анализ. (БДИ форматында);
- иншалар: текст стилен билдәләү, һүрәтләү, ижади, публицистик, фекерләү;
- изложениелар: ижади эш менән, ирекле, инша элементы менән;
- тест;
- телдән яуаптар;
- күнекмәләр.

Уҡыусыларҙың белемдәрен, белеүҙәрен (умение) һәм күнекмәләрен баһалау нормалары.

Телдән биргән яуаптарҙы билдәләү нормалары:

Үтелгәндәрҙе ҡабатлау, уҡыусыларҙан яуап алыу, уларҙың башҡорт теле буйынса белемдәрен һәм күнекмәләрен тикшереү, иҫәпкә алыу, шуның менән бергә, алған белемдәргә таянып, тел берәмектәренә, күренештәренә аңлатма бирергә өйрәтеү алымдарының береһе иҫәпләнә.

Уҡыусының яуабын баһалағанда, түбәндәге *критерийҙар* менән эш ителергә тейеш:

1) яуаптың тулы һәм дөрөҫ булыуы;

2) үтелгәнде аңлы үҙләштереү, аңлау кимәле;

3) яуаптың телмәр төҙөлөшө, әҙәби тел нормаларына ярашлы булыуы.

Уҡыусының телдән биргән яуабы үтелгән материалдың уҡытыусы тәҡдим иткән өлөшөнә логик эҙмә-эҙлекле аңлатманы эсенә алған бәйләнешле телмәр булырға, яуап биреүсе баланың өйрәнелгән ҡағиҙәләргә, билдәләмәләргә таянып эш итә белеүен күрһәтергә тейеш.

Әгәр уҡыусы:

1) тәҡдим ителгән теманы тулы аңлатһа, тел төшөнсәләренә дөрөҫ билдәләмә бирһә;

2) үтелгән материалды тулы аңлауын, белемдәрен практик ҡуллана белеүен күрһәтһә;

3) материалды эҙмә-эҙлекле һәм әҙәби тел нормаларына ярашлы аңлатһа, уның яуабы «5» билдәһе менән баһалана.

Әгәр уҡыусы «5» билдәһен ҡуйыу талаптарына ярашлы яуап бирһә, ләкин һирәк яһала торған хаталар ебәреп тә уҡытыусы иҫкәртеүенән һуң уларҙы төҙәтеп барһа, телендә, телмәр төҙөлөшөндә һирәк-һаяҡ яңылышлыҡтар китһә, уның яуабы «4» билдәһе менән баһалана.

Әгәр уҡыусы тәҡдим ителгән темаға ҡараған төп төшөнсәләрҙе аңлауын һәм белеүен күрһәтһә, ләкин

1) материалды тулы аңлата алмаһа, төшөнсәләрҙең һәм ҡағиҙәләрҙең билдәләмәһендә хаталар ебәрһә;

2) әйткән фекерҙәрен тулы һәм иҫбатлауҙы нигеҙләй белмәһә, үҙ миҫалдарын килтерә алмаһа;

3) яуабында эҙмә-эҙлелек һаҡланмаһа, телмәр төҙөлөшөнда хаталар булһа, уның яуабы «3» билдәһе менән баһалана.

Әгәр уҡыусы һоралған материалдың күберәк өлөшөн белмәүен,билдаләмәләрҙе һәм ҡағиҙәләрҙе әйткәндә уларҙың төп фекерен боҙоуға килтерә торған хаталар ебарһә, материалды икеләнеүҙәр менән системаһыҙ аңлатһа, уның яуабы «2» билдәһе менән баһалана.

*Диктанттарҙы баһалау.*

Уҡытыусы башта тексты уҡып сыға. Өйрәнелмәгән орфограммалы һүҙҙәр алдан уҡ таҡтала яҙылған булырға тейеш. Уҡытыусы синыфтың әҙерлегенә ҡарап, әйтеп яҙҙырыу темпын үҙе билдәләй.

Тексты орфоэпия, әҙәби тел нормаларына ярашлы уҡыу талап ителә.

Диктант яҙылып бөткәс, уҡыусыларға тексты уҡып һәм тикшереп сығыу рөхсәт ителә. Ләкин диктантты баштан уҡ уйлап, аңлап, иғтибарлы яҙырға өйрәтергә һәм һуңғы тикшертеү менән мауыҡмаҫҡа кәрәк. Уҡытыусы тексты икенсе тапҡыр тулы килеш уҡып сыҡҡас та, грамматик эш тәҡдим ителергә тейеш.

*Контроль диктантты тикшергәндә, түбәндәге хаталар төҙәтелә, ләкин баһалағанда иҫәпкә алынмай:*

- мәктәп программаһына индерелмәгән ҡағиҙәгә яҙылыштар;

- әле үтелмәгән ҡағиҙәгә яһалған хаталар;

- автор ҡуйған ҡатмарлы пунктуацияға хаталар;

- механик рәүештә бер хәреф урынына икенсеһен яҙыу (мәҫәлән: *ата* урынына *аша).*

Диктантҡа билдә ҡуйғанда шулай уҡ хаталарҙың характерына иғтибар итергә кәрәк. Хаталарҙы иҫәпләгәндә тупаҫ булмағандары, йәғни грамоталылыҡты билдәләү өсөн әһәмиәте юҡтары, айырым билдәләнә. Бындай хаталарҙың икеһе берәүгә иҫәпләнә.

*Түбәндәге хаталар тупаҫ булмаған хаталарға инә*:

- ҡағиҙәләрҙең иҫкәрмәләренә ҡараған хаталар;

- бәйләү юлы менән яһалған ҡушма яңғыҙлыҡ атамаларҙа ҙур хәрефтең яҙылышына хаталар;

- бер тыныш билдәһе урынына икенсеһен ҡуйыу;

- үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең ялғауҙары яҙылышына хаталар.

Диктант бер генә билдә менән баһалана.

«5» билдәһе — тупаҫ булмаған 1 орфографик, 2 пунктуацион хата булған эшкә,

«4» билдәһе 4 орфографик, 3 пунктуацион йә 1 орфографик, 6 пунктуациоң, йә орфографик хатаһыҙ, 7 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Әгәр хаталар араһында бер типтағылар булһа, 5 орфографик хаталы эшкә лә «4» билдәһе ҡуйырға мөмкин.

«3» билдәһе 6 орфографик, 6 пунктуацион йә 3 орфографик, 9 пунктуацион, йә 12 пунктуацион хаталы эшкә ҡуйыла. Әгәр эштә өс бер типтағы хата ебәрелһә, 8 орфографик, 8 пунктуацион хаталы эшкә лә «3» билдәһе ҡуйырға мөмкин.

«2» билдәһе 9 орфографик, 9 пунктуацион йә 8 орфографик, 10 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Хаталар һаны 15 орфографик хатанан да артып китһә, «1» билдәһе ҡуйыу уҡытыусы ҡарамағында.

Әгәр контроль диктанттан һуң өҫтәмә грамматик, орфографик, лексик эштәр тәҡдим ителһә, уларҙың һәр береһе айырым баһалана.

*Грамматик биремдәрҙе баһалағанда түбәндәгеләрҙе иҫәпкә алыу тәҡдим ителә:*

«5» билдәһе бөтә эште лә теүәл йә бер хата булғанда, «4» билдәһе эштең яртыһынан күберәге дөрөҫ эшләнгәндә,

«3» билдәһе яртыһынан әҙерәге дөрөҫ эшләнгәндә, «2» билдәһе бер эш тә дөрөҫ эшләнмәгәндә ҡуйыла.

Иншаларҙы һәм изложениеларҙы баһалау.

Инша һәм изложениелар яҙҙырыу аша уҡыусыларҙың:

- теманы аса белеүе,тел сараларын инша йәки изложениеның темаһына һәм уларҙағы төп фекерҙе аңлатыу бурыстарына ярашлы һайлай белеүе;

- яҙғанда, грамматик нормаларҙа һәм дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләренә таянып эш итеүе тикшерелә. Шуның өсөн иншаға ла, изложениеға ла һәр ваҡыт ике билдә ҡуйыла. Беренсе билдә менән уларҙың йөкмәткеһе һәм телмар төҙөлөшө, икенсе билдә менән грамоталылыҡ кимәле баһалана.

*Баһаларҙың төп критерийҙары:*

- яҙма эштең йөкмәткеһе тулыһынса темаға тура килһә, фактик хата булмаһа, йөкмәтке эҙмә- эҙлекле бирелһә (план буйынса йәки планһыҙ), эш лексик яҡтан бай булыуы менән айырылып торһа, эш темаға һәм төп фекерҙе аңлатыу маҡсатына ярашлы стилдә яҙылһа, телмәре тасуири булһа, яҙма эштә 1 орфографик йә 1 пунктуацион, йәки 1 грамматик хата (тимәк, бөтәһе 1 генә хата булһа, «5» билдәһе ҡуйыла.

- эштең йөкмәткеһе, темаға тура килһә, йөкмәтке дөрөҫ бирелһә, әммә эштә аҙ ғына хата булһа, төп фекерҙе аңлатыу эҙмә-эҙлелегендә тупаҫ етешһеҙлектәр генә булһа, яҙма эштә, синонимик, грамматик формаларға бай булһа, эш бер төрлө стилдә яҙылһа, тасуири яҡтан айырылып торһа, яҙма эштә 2 орфографик һәм 2 пунктуацион хата, йәки 1 орфографик һәм 3 пунктуацион хата ебәрелһә, «4» билдәһе ҡуйыла.

- яҙма эштә теманы ситкә китеүгә ҡараған етди хаталар булһа, төп фекер дөрөҫ аңлатылһа, әммә эштә фактик хаталар булһа, айырым өлөштәрендә төп фекерҙе аңлатҡанда эҙмә-эҙлелек боҙолһа, яҙма эш бер төрлөрәк типтағы синтаксик конструкцияларҙан торһа, һүҙлеге ярлы, һүҙҙәрҙә хаталар булһа, яңы теманы асыуҙы талап иткән стилдә 4 орфографик һәм 4 пунктуацион хата йәки 3 орфографик, 5 пунктуацион хата йәки 7 пунктуацион хата һәм орфографик хатаһыҙ булһа, «3» билдәһе ҡуйыла.

- яҙма эш темаға тура килмәһә, фактик хаталар күп булһа, эштең бөтә өлөштәрендә фекер аңлатыу эҙмә-эҙлелеге боҙолһа, текст өлөштәрендә бәйләнеш булмаһа, һүҙлек ярлы булһа, эш бер стилдә яҙылмаһа, орфографик хаталары 7, пунктуацион - 7, грамматик хата - 7-нән артһа, «2» билдәһе ҡуйыла.

5-се класс өсөн йомғаҡлау контроль диктанты.

Стәрле йылғаһы буйында.

Стәрлетамаҡ ҡалаһы тәбиғәттең иң матур урынына - Ашҡаҙар, Стәрле, Ағиҙел йылғалары үҙәндәрендә урынлашҡан. Ҡала йылдан-йыл үҙгәрә, киңәйә барған һайын, урындағы тәбиғәттә лә үҙгәрештәр барлыҡҡа килә. Мәҫәлән, унда йәшәүселәр күбәйгәнлектән, ҡырға сығып ял итеүселәр араһында урман-ҡыуаҡлыҡтар һирәгәйә, йәйҙәрен йәшәреп ятҡан болондар тапала, йылға һәм шишмә буйҙары бысрана, хатта күлдәге томбойоҡтар ҙа хәсрәт кисерә. Уларҙы матур сәскәләре өсөн йолҡҡолап алып торалар.

Яҙ булдымы, Ашҡаҙар һәм Стәрле буйҙарында умырзая ҡалҡып сыға. Муйыл, миләш ағастары сәскә атҡас, яр буйлап иҫкән аҡрын ел менән хуш еҫ бөркөлә, өйкөм-өйкөм таллыҡтар араһында үрелеп үҫкән ҡомалаҡ, ҡыҙыл һәм ҡара бөрлөгән , аҡҡа төрөнгән ҡупшы муйыл ағастары күңелдәргә бөтмәҫ-төкәнмәҫ йәм, рәхәтлек өҫтәй. Йыуа ла бар бында, кәзә һаҡалы ла, ҡуҙғалаҡ та, балтырған да. Кейектәргә лә бай был яҡ. Йылғалар балыҡҡа ярлыланһа ла, уларҙа төрлө хайуандар, һыу ҡоштары байтаҡ күренгеләй.

## 6-сы класс өсөн йомғаҡлау контроль диктанты.

### Тыуған яҡ.

Тыуған яҡ! Нисек һағындырғанһың һин, йөрәгемде ҡайһылай елкендереп ебәрҙең! Баҫыуҙарында диңгеҙҙәй арыш - бойҙайың да, ап-аҡ нәфис ҡайындарың да, үлән араһындағы буҙ турғайҙарың да, сәстәремдән иркәләп иҫкән йомшаҡ елдәрең дә миңә бик яҡын.

Тыуған яҡҡа ҡайтыу ҡалай күңелле! Илһеҙ ҙә, ерһеҙ ҙә ғүмер ҡороу аяныстыр ул. Кешенең ус аяһындай ғына булһа ла төйәге булырға тейештер. Ҡуш йоҙроҡ хәтлем генә булһа ла, йөрәктең дә бит тамырланыр, йәшәү өсөн һут алыр ере булыу мотлаҡ. Шунһыҙ кеше үҙен етем итеп тойор ине, йөрәге һыҡрар ине.

Тыуған ауылым, Ватаным булыуға ысын – ысынлап шатланам мин. Кешенең тыуған ере булыу бик ҙур бәхет тә баһа! Шунан да ҙурыраҡ бәхеттең булыуы мөмкинме һуң! (Д. Бүләков).

## 7-се класс өсөн йомғаҡлау контроль диктанты.

### Янғантау.

Янғантау, беҙҙең Башҡортостандағы шифахана, тәпәшәк кенә бер тауҙа урынлашҡан. Тауҙың бейеклеге ни бары 413 метр. Бынан күп йылдар элек унан эҫе газ һәм пар сыға башлаған. Башта, эҫелек бик көслө булғанда, унда юнышҡы ташлаһаң, ул ялҡынланып яна башлаған. Хәҙер инде эҫелеге 35 градустан артмай. Бындағы, ошо тау тирәһендәге, халыҡ уның бер файҙалы яғын күптән белеп алған.

Уны тәү башлап бер көтөүсе ҡарт асҡан. Ҡарттың аяҡтары бик һыҙлай торған булған. Ошонда, тау буйында, көтөү көткәндә, һыҙлауына түҙә алмайынса, аяҡтарын газ һәм пар сыға торған ергә ҡуйып йылыта торған булған. Бер аҙ ултырғас та, һыҙлауы баҫыла төшкәндәй булған. Шунан һуң ул көн дә, көтөүен ошо тау битенә ебәреп, аяҡтарын тау ярығында йылыта торған булған. Бер ай самаһы ваҡыт  үтеүгә, аяҡтарының һыҙлауы бөтөнләй баҫылған.

1937 йылда бында шифахана асылды. Ауырыу кешеләр, башлыса ревматизм менән яфаланыусылар, дауаланып, сәләмәтләнеп ҡайталар (Ғ.Әмириҙән).

## 8-се класс өсөн йомғаҡлау контроль диктанты.

### Күңелле ине ул саҡтар.

Әсәһе сәләмәт саҡта, ҡайһылай күңелле ине! Улар ял көндәрендә Дим буйына сыа торайнылар. Иртәнсәк тымыҡ урамдар буйлап, селәүсен тултырылған ҡалай банка тотҡан һәм, мылтыҡлы һалдат һымаҡ, ҡармаҡ һаптарын иңбашына һалған Сәлих иң алдан бара; уның артынан биҙрә күтәргән әсәһе килә; ә иң арттан, йоҡоһо асылып етмәгән Рәшиҙәне елкәһенә атландырып, атаһы атлай.

Өфө ултырған тауҙан һоҡланғыс күренеш асыла: тау аҫтында Ағиҙел тын ғына ағып ята; уға һалынған тимер күпер аша, төтөнөн аҡ шарфтай елберләтеп, поезд сығып бара; күперҙән бер ни тиклем үрҙәрәк Ағиҙелгә тымыҡ Дим килеп ҡушыла; ә йылға аръяғында күҙ иңләмәҫ яландар һәм урмандар. Тиҙерәк шул урмандарға! һәм Сәлих тау аҫтына йүгереп төшөп китә.

Дим буйында улар балыҡ тоталар, тәмле балыҡ һурпаһы бешерәләр, һыу керәләр, ҡомға ятып, ҡояшта ҡыҙыналар, туйғансы йоҡлайҙар һәм кисен генә, күҙ бәйләнер алдынан ғына, өйгә ҡайталар ине.

Ә хәҙер Сәлих бер ҡайҙа ла сыға алмай: ауырыу әсәһен, өс йәшлек һеңлеһе Рәшиҙәне ҡарар кеше юҡ.

(Х.Мохтар).

9-сы класс өсөн йомғаҡлау контроль диктанты.

Салауат Юлаев.

Салауат Юлаев башҡорт халҡының тарихында иң бөйөк, айырыуса дан һәм бөтмәҫ-төкәнмәҫ мөхәббәт ҡаҙанған шәхестәребеҙҙең береһе, батырлыҡ һәм ил мәнфәғәтенә тоғролоҡ өлгөһө, башҡорт милләтенең рухи ҡаһарманлыҡ символы. Милли герой, 1773-1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышының полководецы, шағир-импровизатор. Кешелек донъяһында милли-азатлыҡ хәрәкәттәренең һоҡланғыс етәкселәренең береһе.

Әлбиттә, Салауат хаҡында һөйләгәндә, ниндәй генә эпитеттар ҡулланһаң да, аҙ һымаҡ. Фәндә, әҙәбиәттә, сәнғәттә Салауат темаһы һис ваҡыт тамамланмаҫ илаһи бер темаға әйләнде. Уның хаҡында яҙылған әҫәрҙәр һәм хеҙмәттәр бихисап. Уның исемен, уның образын башҡорт халҡы үҙ ижадында эпос геройҙарына тиң булырҙай бейеклектәргә күтәрҙе. Милләтебеҙ символы - дәһшәтле һыбайлы Салауат һыны тарихыбыҙҙың яңы боролошонда Башҡортостан Республикаһының Дәүләт гербында урын алып, инде тотош бер илдең ырыҫ, ҡот билдәһенә әйләнде. Салауат исеме беҙҙең өсөн икһеҙ- сикһеҙ ғорурлыҡ, рухи күтәренкелек сығанағы, ул һәр ваҡыт беҙҙе әйҙәп тороусы көс, ул башҡорттоң ҡайнар йөрәк тибеше, мәңге һүнмәҫ һәм һүрелмәҫ азатлыҡ рухы. (Р. Шәкүр.)

## II. УҠЫУ ПРЕДМЕТЫНЫҢ ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Программа буйынса башҡорт теленә өйрәтеүҙең маҡсаты: уҡыусыларҙың телмәр эшмәкәрлеген формалаштырыу, телдең системаһын (фонетика, орфография, орфоэпия, грамматика, пунктуация) өйрәнеү, бәйләнешле текст менән эшләргә өйрәтеү.

Уҡыу предметына дөйөм характеристика.

Коммуникатв компетенция телмәр эшмәкәрлегенең төрҙәре, һөйләү һәм яҙма телмәр төрҙәрен үҙләштереүҙе иҫәптә тота, тел материалын һәм күнекмәләрҙе кәрәкле ситуацияларҙа ҡуллана алыуҙы талап итә. Коммуникатив компетенция аралашыуҙың маҡсатын билдәләй, телмәр ситуацияһын баһалай белеүҙе, аралашыусының коммуникация ысулдарын һәм ниәттәрен иҫәпкә алыуҙы, адекват стратегик аралашыуҙы һайлауҙы һәм үҙ телмәренде аңлы рәүештә үҙгәртеүгә әҙер булыуҙы күҙ уңында тота.

Тел һәм лингвистик компетенция йәмғиәт күренеше буларак, тел тураһында тейешле белемде үҙләштереү нигеҙендә уның төҙөлөшөн, үҫешен, хәрәкәттә булыуын формалаштырыуҙы аңлата; башҡорт әҙәби теленең төп нормаларын үҙләштереү; һүҙлек запасын һәм уҡыусы телмәренең грамматик төҙөлөшөн байытыу; фән буларак лингвистика тураһында тейешле белем, уның төп бүлектәренә кәрәкле булған тел күренешен һәм факттарын анализлау һәм баһалау мөмкинлеген формалаштырыу; төрлө төрҙәге лингвистик һүҙлектәр менән ҡуллана белеү.

Мәҙәни компетенция туған телдең мәҙәниәтен сағылдырыусы форма буларак аңлауҙы күҙ уңында тота, тел һәм халыҡ тарихының бәйләнештә булыуын, башҡорт теленең милли-мәҙәни үҙенсәлеген, башҡорт телмәр этикет нормаларын үҙләштереүҙе, халыҡ-ара аралашыу мәҙәниәтен үҙләштереү; милли мәҙәни компонентлы һүҙҙәр мәғәнәһен аңлатыуҙы белдерә.

Башҡорт теле курсының коммуникатив-эшмәкәрлек йүнәлешен көсәйтеү, уны белем алыуҙа метапредмет һөҙөмтәләргә йүнәлтеү кешенең тышҡы мөхиткә тиҙ яраҡлашыу һәләтле һәм унда әүҙем эшмәкәрлете дауам итеүгә һәләтле буларак, функциональ грамоталыҡты формалаштырыуҙың мөһим шарттары булып тора.

Шулай итеп, төп дөйөм белем биреү мәктәбендә башҡорт телен уҡытыу баланың дөйөм мәҙәни кимәлен үҫтерергә, артабан уҡыуын төрлө белем биреү учреждениеларында дауам итә алырлыҡ булырға тейеш.

5-СЕ КЛАСС.

| № | Бүлек | Бүлектең йөкмәткеһе | Сәғәт һаны |
|---|---|---|---|
| 1 | 1-4 кластарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлау | Исем. Сифат. Сифат дәрәжәләре. Һан. Ҡылым (ҡабатлау). | 2 |
| 2 | Синтаксис һәм пунктуация. Телмәр мәҙәниәте | Синтаксис. һүҙбәйләнеш. Һүҙбәйләнештә эйәртеүсе һәм эйәреүсе һүҙҙәәр. Һөйләм. Хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәр. Һөйләмдең баш киҫәктәре. Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре.<br>Һөйләмдең тиң киҫәктәре. Тиң киҫәктәр араһында тыныш билдәләре. Текст. Текстың өлөштәре. Өндәш һүҙ. Ҡушма һөйләм. Тура телмәр. Диалог. | 16 |

| | | | |
|---|---|---|---|
| 3 | Фонетика. Графика. Орфография. Орфоэпия. Телмәр мәҙәниәте | Һуҙынҡы өндәр. Тартынҡы өндәр. Өн һәм хәреф. Алфавит. Айырыу билдәләре ь, ъ. Уларҙың дөрөҫ яҙылышы. Ижек, уның төрҙәре. Һүҙҙәрҙе юлдан юлға күсереү. Баҫым. Баҫым төрҙәре. Һуҙынҡыларҙың дөрөҫ әйтелеше. Тартынҡыларҙың дөрөҫ әйтелеше. Өндәрнең оҡшашыуы | 15 |
| 4 | Лексика. Телмәр мәҙәниәте. | Һүҙҙәрҙең күп мәғәнәлелеге. Һүҙҙәрҙең күсмә мәғәнәһе. Омонимдар. Синонимдар. Антонимдар. | 5 |
| 5 | Һүҙъяһалыш. Орфография. Телмәр мәҙәниәте | Тамыр һәм яһалма һүҙҙәр. Ялғау төрҙәре. Һүҙьяһалыш юлдары. Ҡушма һүҙҙәр. Ҡушма һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы. | 7 |
| 6 | Морфология. (41 сәғәт) | Морфология тураһында төшөнсә. Үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙҙәр. Исем һәм уны телмәрҙә ҡулланыу. Исемдең мәғәнәһе, морфологик билдәләре. Уртаҡлыҡ һәм яңғыҙлыҡ исемдәр. Исемдәрҙең яһалышы. Ҡылым. Морфологик билдәләре. Ҡылымдың заман, зат һәм һан менән үҙгәреше. Үҙ аллы һәм ярҙамсы ҡылымдар. Тамыр һәм нигеҙ ҡылым. Ҡылымдарҙың яһалышы. Ҡылымдарҙың затлы формалары. | 22 |
| 7 | Үтелгәнде ҡабатлау. | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау, системалаштырыу. | 1 |
| | | Бөтәһе: | 68 |

6-СЫ КЛАСС.

| № | Бүлек | Бүлектең йөкмәткеһе | Сәғәт һаны |
|---|---|---|---|
| 1 | "Фонетика, лексика" бүлектәрен ҡабатлау. | Әсә теле тураһында әңгәмә. "Фонетика, лексика" бүлектәрен ҡабатлау. Һүҙьяһалыш. | 2 |
| 2 | Лексика. | Лексика. Башҡорт теленең һүҙлек составы. Төп башҡорт һәм үҙләштерелгән һүҙҙәр. Башҡорт телендә дөйөм ҡулланылышлы һүҙҙәр. Халыҡ-ара һәм профессиональ һүҙҙәр. Иҫкергән һәм яңы һүҙҙәр. Диалект һүҙҙәр. "Лексика" темаһы буйынса үҙ аллы эш. Фразеологик берәмектәр. "Лексика" темаһын йомғаҡлау. | 7 |
| 3 | Исем һәм уны телмәрҙә ҡулланыу. | Исемдең грамматик категориялары. Исемдәрҙең һан менән үҙгәреше. | 7 |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | Күплек ялғауының дөрөҫ яҙылышы. Исемдәрҙең эйәлек заты менән үҙгәреше. Исемдәрҙең хәбәрлек заты менән үҙгәреше. Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше. “Исем” темаһын ҡабатлау. | |
| 4 | Сифат һәм уны телмәрҙә ҡулланыу. | Сифат. Сифаттың һөйләмдәге роле. Сифаттарҙың яһалышы. Төп һәм шартлы сифаттар. Сифат дәрәжәләре. Сифаттарҙың дөрөҫ яҙылышы. Синоним сифаттар. “Сифат” темаһын ҡабатлау. | 5 |
| 5 | Һан һәм уны телмәрҙә ҡулланыу. | Һан тураһында төшөнсә. Ябай һәм ҡушма һандар. Һан төркөмсәләре. Һандарҙың дөрөҫ яҙылышы.Үлсәү һүҙҙәре. “Һан” темаһы буйынса үткәндәрҙе ҡабатлау. | 5 |
| 6 | Алмаш һәм уны телмәрҙә ҡулланыу. | Алмаш. Телмәрҙәге роле, мәғәнә үҙенсәлектәре. Алмаш төркөмсәләре. Алмаштарҙың килеш һәм һан менән үҙгәреше. Алмаштарҙың килеш менән үҙгәреше. Алмаштарға грамматик анализ. | 4 |
| 7 | Ҡылым һәм уны телмәрҙә ҡулланыу. | “Ҡылым”темаһы буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Ҡылым төркөмсәләре. Исем ҡылым. Уртаҡ ҡылым. Сифат ҡылым. Сифат ҡылымдарҙың хәҙерге, үткән, киләсәк заманы. Хәл ҡылымдар. Хәл ҡылымдың төрҙәре. “Ҡылым” төркөмсәләрен ҡабатлау. Ҡылым йүнәлештәре. Ҡылым күләмдәре. Ҡылым рәүешлеге. Ҡылымдарға грамматик анализ. “Ҡылым” темаһын ҡабатлау. | 15 |
| 8 | Рәүеш һәм уны телмәрҙә ҡулланыу. | Рәүеш. Грамматик һәм морфологик билдәләре. Рәүеш төркөмсәләре. Рәүештең сифат менән оҡшаш һәм айырмалы яҡтары. Рәүеш дәрәжәләре. Рәүештәрҙең яһалышы. Рәүештәрҙең дөрөҫ яҙылышы. Грамматик анализ. | 6 |
| 9 | Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре. | Теркәүестәр. Бәйләүестәр. Киҫәксәләр һәм уны телмәрҙә ҡулланыу. Мөнәсәбәт һүҙҙәр һәм уны телмәрҙә ҡулланыу. Ымлыҡтар һәм уны телмәрҙә ҡулланыу. | 15 |
| 10 | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау, системаға һалыу. | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Текст өҫтөндә эш. Үтелгәндәрҙе йомғаҡлау. | 2 |
| Бөтәһе: | | | 68 |

7-СЕ КЛАСС.

| № | Бүлек | Бүлектең йөкмәткеһе | Сәғәт һаны |
|---|---|---|---|
| 1 | Лексика, фонетика, морфология, орфография буйынса үтелгәндәрҙе | Тел – аралашыу ҡоралы. Фонетика, орфография, орфоэпия. (ҡабатлау). Морфология һәм лексика. Тамыр һәм яһалма һүҙ. Яһаусы һәм үҙгәртеүсе | 4 |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | ҡабатлау | ялғау. | |
| 2 | Синтаксис һәм пунктуация, һүҙбәйләнеш, һөйләм, текст, һөйләмдә һүҙҙәр бәйләнеше. | Һүҙбәйләнеш һәм һөйләм. Һүҙбәйләнеш төрҙәре.<br>Теҙмә һәм эйәртеүле бәйләнеш. Ярашыу. Башҡарылыу. Йәнәшәлек.<br>Һөйкәлеү. Һүҙбәйләнештәр. (ҡабатлау). Һүҙбәйләнеш һәм ҡушма һүҙ.<br>Нығынған һүҙбәйләнештәр. | 11 |
| 3 | Ике һәм бер составлы составлы ябай һөйләмдәр. | Ябай һөйләм. Һөйләмдең баш киҫәктәре. Эйә менән хәбәр араһында һыҙыҡ. Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре. Аныҡлаусы. Тиң һәм тиң булмаған аныҡлаусылар. Өҫтәлмәлек. Тултырыусы. Тура һәм ситләтелгән тултырыусы. Хәлдәр. Рәүеш, күләм-дәрәжә хәлдәре. Урын, ваҡыт хәлдәре. Шарт хәле. Сәбәп, маҡсат хәлдәре. Кире хәлдәр. Һөйләмдә һөйләм киҫәктәренең урынлашыу тәртибе. Ике һәм бер составлы һөйләм. Бер составлы һөйләмдәр. Билдәле эйәле һөйләм. Билдәһеҙ эйәле һөйләм. Эйәһеҙ һөйләм. Атама һөйләм. Тулы һәм кәм һөйләмдәр. Тиң киҫәктәр. Тиң киҫәктәр эргәһендә тыныш билдәләре. Тиң киҫәктәр эргәһендә дөйөмләштереүсе һүҙҙәр. | 26 |
| 4 | Өндәш һүҙҙәр, инеш һүҙҙәр. | Өндәш һүҙҙәр. Өндәш һүҙҙәр эргәһендә тыныш билдәләре.<br>Инеш һүҙ һәм инеш һөйләмдәр. Инеш һүҙ һәм инеш һөйләм эргәһендә тыныш билдәләре. Өндәш һәм инеш һүҙҙәрҙе ҡулланыу. | 7 |
| 5 | Һөйләмдең айырымланған киҫәктәре. | Хәл әйтемдәре һәм уларҙың үҙенсәлектәре. Хәл әйтемдәренең айырымланыуы. Айырымланған хәлдәр. Ябай һөйләмгә тулы синтаксик анализ яһарға өйрәнеү. | 10 |
| 6 | Тура һәм ситләтелгән телмәр, диалог. | Тура һәм ситләтелгән телмәр. Тура телмәрле һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре. Тура һәм ситләтелгән телмәрҙе ҡабатлау.<br>Диалог. Цитата. | 7 |
| 7 | 5-7 класта үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | 3 |
| | | Бөтәһе: | 68 |

8-СЕ КЛАСС.

| № | Бүлек | Бүлектең йөкмәткеһе | Сәғәт һаны |
|---|---|---|---|
| 1 | Үтелгәнде ҡабатлау. Илем, телем, ерем. | Үтелгәнде ҡабатлау. Илем, телем, ерем. Тиң киҫәктәр эргәһендә тыныш билдәләре. Инеш һүҙҙәр, хәл әйтемдәре. Айырымланған хәл әйтемдәре, тура телмәр. Ябай һөйләм (ҡабатлау). | 7 |

| | | | |
|---|---|---|---|
| 2 | Теҙмә ҡушма һөйләмдәр | Ҡушма һөйләм төрҙәре. Теҙмә ҡушма һөйләм. Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләм. Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдә тыныш билдәләре. Теркәүесле теҙмә ҡушма  һөйләмдә тыныш билдәләре. Теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәр. Тыныш билдәләренең ҡуйылышы. «Теҙмә ҡушма һөйләм» темаһын йомғаҡлау. | 11 |
| 3 | Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр | Баш һәм эйәрсән һөйләмдәр. Баш һөйләмдәрҙең эйәрсән һөйләмдәргә эйәреп килеү саралары. Эйәртеүлеле  ҡушма һөйләмдә тыныш билдәләре. Эйә һөйләм.  Эйәрсән хәбәр һөйләм. Аныҡлаусы һөйләм.  Тултырыусы һөйләм. Ваҡыт һөйләм . Урын һөйләм. Рәүеш һөйләм. Күләм - дәрәжә һөйләм.  Сәбәп һөйләм. Маҡсат һөйләм.  Шарт һөйләм.  Кире һөйләмдәр. Эйәрсән һөйләм төрҙәрен ҡабатлау. | 24 |
| 4 | Ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләр | Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәр тураһында дөйөм төшөнсә. Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре.  Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәр тураһында дөйөм төшөнсә. Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре.  Теҙем тураһында дөйөм төшөнсә. Уларҙың стилистик роле. | 12 |
| 5 | Тыныш билдәләре ҡуйылышын ҡабатлау,  дөйөмләштереү | Һөйләм аҙағында тыныш билдәләре. Ябай һөйләмдәрҙән һуң тыныш билдәләре. Ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре. Тура телмәрле һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре. | 14 |
| | | Бөтәһе: | 68 |

9-СЫ КЛАСС.

| № | Бүлек | Бүлектең йөкмәткеһе | Сәғәт һаны |
|---|---|---|---|
| 1 | Тел тураһында дөйөм төшөнсә. | Тел тураһында дөйөм төшөнсә. Башҡорт теле – башҡорт халҡының милли теле. Башҡорт теле башҡа ҡәрҙәш телдәр араһында. Әҙәби тел һәм диалект. Башҡорт теленең диалекттары. Башҡорт әҙәби теле, унын үҫеше. Ике теллелек. | 8 |
| 2 | Функциональ стилдәр. | Башҡорт теленең стилдәре. Йәнле һөйләү стиле. Матур әҙәбиәт стиле. Фәнни стиль. Публицистик стиль. Рәсми эш ҡағыҙҙары стиле. Хаттар стиле. | 16 |
| 3 | Һүрәтләү саралары. | Һүрәтләү саралары. Эпитет. Сағыштырыу. Метафора. Синонимдар. Грамматик синонимдар. Тасуирлауҙа антитезаны файҙаланыу. Һүҙҙе һәм уның формаларын телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу. | 12 |

| | | | |
|---|---|---|---|
| 4 | Фонетика һәм графика. Лексика. Һүҙьяһалыш. | Фонетика һәм графика. Орфоэпия. Орфография. Лексика. Башҡорт теленең һүҙлектәре. Һүҙьяһалыш. Ялғау төрҙәре. | 12 |
| 5 | Морфология һәм синтаксис. | Морфология. Үҙ аллы һүҙ төркөмдәре. Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре. Синтаксис. (Һөйләм төрҙәре, һүҙбәйләнеш). | 8 |
| 6 | Пунктуация (ҡабатлау). | Пунктуация (ҡабатлау). Тыныш билдәләренең дөрөҫ ҡуйылышы. Тыныш билдәләренең дөрөҫ ҡуйылышы. Ябай һөйләм синтаксисы (ҡабатлау). Ҡушма һөйләмдәр. (ҡабатлау). | 8 |
| 7 | Үтелгәнде ҡабатлау. | | 4 |
| | | Бөтәһе: | 68 |

## III. ТЕМАТИК ПЛАНЛАШТЫРЫУ

### 5-СЕ КЛАСС.

| № | Дәрес темаһы | Дәрестәр һаны |
|---|---|---|
| 1 | 1-4 кластарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлау | 2 |
| 2 | Синтаксис һәм пунктуация. Телмәр мәҙәниәте | 16 |
| 3 | Фонетика. Графика. Орфография. Орфоэпия. Телмәр мәҙәниәте | 15 |
| 4 | Лексика. Телмәр мәҙәниәте. | 5 |
| 5 | Һүҙъяһалыш. Орфография. Телмәр мәҙәниәте | 7 |
| 6 | Морфология. | 22 |
| 7 | Үтелгәнде ҡабатлау. | 1 |
| | Бөтәһе: | 68 |

### 6-СЫ КЛАСС.

| № | Дәрес темаһы | Дәрестәр һаны |
|---|---|---|
| 1 | “Фонетика, лексика” бүлектәрен ҡабатлау. | 2 |
| 2 | Лексика. | 7 |
| 3 | Исем һәм уны телмәрҙә ҡулланыу. | 7 |
| 4 | Сифат һәм уны телмәрҙә ҡулланыу. | 5 |
| 5 | Һан һәм уны телмәрҙә ҡулланыу. | 5 |
| 6 | Алмаш һәм уны телмәрҙә ҡулланыу. | 4 |
| 7 | Ҡылым һәм уны телмәрҙә ҡулланыу. | 15 |
| 8 | Рәүеш һәм уны телмәрҙә ҡулланыу. | 6 |
| 9 | Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре. | 15 |
| 10 | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау, системаға һалыу. | 2 |
| | Бөтәһе: | 68 |

## 7-СЕ КЛАСС.

| № | Дәрес темаһы | Дәрестәр һаны |
|---|---|---|
| 1 | Лексика, фонетика, морфология, орфография буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау | 4 |
| 2 | Синтаксис һәм пунктуация, һүҙбәйләнеш, һөйләм, текст, һөйләмдә һүҙҙәр бәйләнеше. | 11 |
| 3 | Ике һәм бер составлы составлы ябай һөйләмдәр. | 26 |
| 4 | Өндәш һүҙҙәр, инеш һүҙҙәр. | 7 |
| 5 | Һөйләмдең айырымланған киҫәктәре. | 10 |
| 6 | Тура һәм ситләтелгән телмәр, диалог. | 7 |
| 7 | 5-7 класта үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | 3 |
| | Бөтәһе: | 68 |

## 8-СЕ КЛАСС

| № | Дәрес темаһы | Дәрестәр һаны |
|---|---|---|
| 1 | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау . | 7 |
| 2 | Теҙмә ҡушма һөйләмдәр. | 11 |
| 3 | Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр . | 24 |
| 4 | Ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләр. | 12 |
| 5 | Тыныш билдәләре ҡуйылышын ҡабатлау, дөйөмләштереү | 14 |
| | Бөтәһе: | 68 |

## 9-СЫ КЛАСС

| № | Дәрес темаһы | Дәрестәр һаны |
|---|---|---|
| 1 | Тел тураһында дөйөм төшөнсә. | 9 |
| 2 | Башҡорт әҙәби теленең стилдәре. | 11 |
| 3 | Һүрәтләү саралары | 12 |
| 4 | Фонетика, орфоэпия, орфография | 7 |
| 5 | Лексика, һүҙьяһалыш. | 8 |
| 6 | Морфология | 6 |
| 7 | Синтаксис һәм пунктуация. | 11 |
| 8 | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | 4 |
| | Бөтәһе: | 68 |